# ШӘЙХЗАДА БАБИЧ — ҺҮҘ ОҪТАҺЫ

*(Ш. Бабич шиғырҙарының тел-стиль үҙенсәлектәре)*

Шәйхзада Бабич поэзияһының лексикаһы ифрат бай һәм үҙенсәлекле. Шағир ғәрәп-фарсы һүҙҙәрен, дини лексиканы күп ҡулланһа ла, әҫәрҙәре теленең аңлайышлы, халыҡсан булыуына ынтылды. Был үҙенсәлек шағирҙың классик поэзия өлгөләрен, халыҡтың бай ауыҙ-тел ижадын яҡшы белеүенә һәм уларҙы оҫта файҙаланыуына бәйләнгән. Ш. Бабич башҡорт яҙма әҙәби телен үҫтереүгә тос өлөш индерҙе. Уның күп шиғырҙары башҡорт телендә яҙылған. Был фекерҙең дөрөҫлөгөн беҙ Ҡазанда сыҡҡан «Зәңгәр жырлар» (1990) китабында ла күрәбеҙ. Йыйынтыҡҡа Ш. Бабичтың шиғырҙары, поэмалары, эпиграммалары, мәҡәләләре һәм хаттары тупланған. Шағир ижадына арналған бындай тулы йыйынтыҡ тәү тапҡыр донъя күрә. Татарстанда баҫылыуына ҡарамаҫтан, Ш. Бабичтың байтаҡ шиғырҙары нисек яҙылған булһа, шулай килтерелә. Мәҫәлән:

*Байрамҡаең, башҡорд, ҡотты булһын,*
*Шатдыҡ менән тулһын йөрәгең;*
*Бер алландан һора: изге көндә*
*Ҡабул ҡыл, тип, башҡорд теләген!*

(«Байрам», 1918)

*Салауат — Урал балаһы,*
*Салауат — йөрәк ҡабәһе!*
*Йирдә әннур гәүдәһе*
*Күкдә зәңгәр шәүләһе!*

(«Салауат батыр», 1918).[1]

Ш. Бабичтың үҙ әҫәрҙәрен башҡортса баҫтырып сығарыуға ынтылышы ла билдәле. Әммә ул ваҡыттағы татар милләтселәренең ҡаршылығы арҡаһында шағир үҙ теләгенә ирешә алмай.

Ш. Бабич шиғырҙарында **синонимдар** урынлы һәм уңышлы ҡулланыла (рушан — һылыу — матур; сәскә — гөл; һандуғас — былбыл, мәләк — фәрештә; ожмах — фирдәүес — йәннәт; алла — хоҙай — тәңре — раббы; ирек — азатлыҡ — хөрлөк; кеше — инсан — йән-зат; көлмә — ауыҙың йырма; күңелең — кәйең; башҡорт атлы арыҫлан, башҡорт тигән арыҫлан, башҡорт улы арыҫлан һ.б.). Шуныһы характерлы, автор, синоним һүҙҙәренең яңыһын да, иҫкеһен дә ҡулланып, строфаларҙың ритмик яңғырашын, рифмаһын һығылмалы итә, стилистик шымалыҡҡа ирешә, заман һулышын тулыраҡ күҙ алдына баҫтыра. Мәҫәлән, «Мин китер саҡта» (1917) шиғырын алайыҡ.

*Мин китер саҡта ғына һөйкөмлө күренә* **һәммә** *шәй*
**Барсаһы** *шат,* **барыһы** *яҡты,* **барыһы** *нурлы миҫле ай!*[2]

---

[1] Ҡарағыҙ: Бикбаев Р. Т. Бабич ижады һәм тормошо. Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте. 1981, 117-се бит.

[2] Шәйхзада Бабич. Шиғырҙар, поэмалар. Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте. 1985. Артабан да миҫалдар ошо баҫманан килтерелә.

Килтерелгән өҙөктә **һәммә — барсаһы — барыһы** синоним һүҙҙәр. Улар ярҙамында шағир стилистик шымалыҡҡа ирешә.

*Бер танышта һеҙгә бағланды* **күңелдән** *хөрмәтем,*
*Оҡшаны* **ҡәлбең,** *һүҙең һәм нурға сумған килбәтең.*

Был өҙөктә шағир «күңел» менән «ҡәлеб» һүҙҙәрен ҡулланған. Улар икеһе лә бер үк мәғәнәне белдерә: береһе (күңел) телмәрҙә йыш ҡулланыла, икенсеһе (ҡәлеб) иҫкергән һүҙ. Әммә строфаның ритмын булдырыуҙа һәм рифмаһын төҙөүҙә уларҙың бирелеше урынлы.

Билдәле булыуынса, Ш. Бабичтың ҡатын-ҡыҙҙарға һәм мөхәббәт темаһына арналған шиғырҙары байтаҡ. Ҡатын-ҡыҙҙар образын һынландырыу өсөн шағир матур-матур грамматик синонимдар таба (был синонимдарҙың яһалышы метонимияға нигеҙләнгән).

*Йәш, таҙа буйҙаҡ егеттәр илгә һау ҡайтһын, тиеп,*
*Сихри шаршауҙың эсендә* **наҙлы нәҙек бил көтә**

(«Көтәләр», 1917).

*Гөл сығыр сәскә атып, ҡырҙар булырҙар сып-сыбар,*
*Гөл йыйырға нурлы йөҙлө* **наҙлы нескә бил сығыр.**

(«Яҙғы байрамдар», 1915).

**Ҡыҙыл ирен** *бер йылмайһа, хоҙай шаһит,*
*Бөтә фекер әсир төшөр, аҡыл шөрләр...*
*Көсөгөҙҙө иман итеп, мин бағындым,*
*Йөрәгемә мөхәббәт һал,* **матур һындар**

(«Матур һындар», 1916)

«Ҡандала» балладаһында иһә лексик, фразеологик һәм грамматик синонимдарҙың йәнәш ҡулланылыуы әҫәрҙең поэтик байлығын тағы ла раҫлай. Мәҫәлән:

*Ник тиһәң, баш өҫтөнә ул менде* **тиҙ.**
*Шул ҡәҙәр, тиҙ — тик асып йомғансы күҙ.*
*«Тиҙ һикер,* **тиҙ, тиҙ** *һикер,* **тиҙ диуана!**
*Торма,* **мәжнүн,** *унда күренеп донъяға!»*
**Тиҙ генә** *керпеккә ул* **һикереп төшә,**
*Ҡаш янынан эҙҙәрен һыпырып төшә.*
**Ырғый,** *нәҡ керпек осона тап килә,*
*Ул аяҡтарҙы, ҡәһәр,* **шәп** *әләктерә.*
**Ашығып-ашығып,** *ҡан эсер яҡты ҡарай*
*Күҙ төбөнә* **тиҙ генә** *моронон ҡаҙай.*

Һуңғы ике строфала **диуана — мәжнүн, һикереп төшә — ырғый** лексик синонимдар: **тиҙ-тиҙ — шәп — ашығып-ашығып** шулай уҡ бер мәғәнәгә эйә, әммә улар тиң киҫәк һәм парлы һүҙ рәүешендә бирелгән; **«тиҙ генә керпеккә ул һикереп төшә»—«ырғый, нәҡ керпек осона тап килә»**— һөйләмдәр менән белдерелгән грамматик синонимдар.

Ш. Бабич шиғриәтендә **ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр** тағы ла йышыраҡ осрай. Был, күрәһең, тормоштоң ҡапма-ҡаршылығы, шағирҙың уға ҡаршылыҡлы мөнәсәбәте менән аңлатылалар. Ғөмүмән, Ш. Бабичтың бөтә әҫәрҙәре тип әйтерлек антитезаға ҡоролған. «Бай һәм ярлы», «Һалдатҡа алынған бер дуҫыма», «Халҡым өсөн», «Әллә алла, әллә иблис», «Көтәм», «Үткән көндәр», «Әйҙә, күңелем» һ.б. әҫәрҙәре юғарылағы фекерҙе раҫлай. Шағирҙың мөхәббәте һәм нәфрәте һәр саҡ йәнәш йөрөй. Ул халҡына, иленә ҡайнар һөйөүен йәлләмәне, дошмандарға булған нәфрәтен сатира уты аша көйҙөрҙө. Мәҫәлән, «Халҡым өсөн» шиғырының бөтә йөкмәткеһе антитеза алымына ҡоролған. Был поэтик сара аша автор туған халҡына булған тәрән һөйөү хистәрен еткергән:

*Дәртле ҡайнар йырҙарымды*
**Йырламыйм** *дәртем өсөн;*
**Йырлайым** *тик мәңге шат,*
*Дәртле, көләс халҡым өсөн.*

**Иламайым** *мин көндәрем*
*Һырғаҡ, һыуыҡ һалҡын өсөн;*
**Илайым** *тик ярлы, меҫкен*
*Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.*

Килтерелгән строфаларҙа **йырламыйм — йырлайым, иламайым — илайым** кеүек ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр аша шағир әҫәрҙең йөкмәткеһенә ярашлы форма таба алған.

Шағирҙың «Көтәм» шиғыры ла (1916) киҫкен контраст картиналарҙы һүрәтләү менән башланып китә: тауҙар, туғайҙар шундай йәмле,— әйтерһең, гөлстан; ә ундағы кешеләр тормошо шул тиклем ғәмле, хәсрәтле,— әйтерһең, бында гүрстан. Ошо күренеште күргән шағир, янып-көйөп, йөрәге әрнеп: «Килерме икән аҡ көн беҙгә лә?»— тип, күпте күргән Урал тауына һорау бирә.

«Үткән көндәр» (1915) шиғырындағы төп композицион алым да ҡабатлауҙар һәм антитеза:

*Бына әле илап, әле* **көлдөм,**
*Әле көйҙөм, әле* **һыҙландым;**
Бына әле **йырлап,** әле **тындым,**
*Әле бар донъяһын ҡыҙғандым.*

Әҫәрҙә ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр генә ҡулланылмай, бөтә йөкмәтке антитезаға ҡоролған: ер тормошо менән ен донъяһы, шағир шәхесе менән йәмғиәт араһындағы ҡаршылыҡтарҙы һүрәтләү аша поэтик фекер үҫтерелә.

Ш. Бабич поэзияһында **омонимдарға** ла байтаҡ миҫалдар табырға мөмкин.

*а) Ҡашың* **ҡара,** *күҙең* **ҡара,** *Сара туташ,*
*Күтәрелеп бисараңа* **ҡара,** *туташ!*
*б) Ҡуйыныңа, Мәрйәм, иреңде ал да тирбәт, иркәлә,*
*Муйыныңа ҡул* **һалһа** *ситтәр,* **һал** *да ебәр елкәгә.*
*в) Алмагөл аһ, бешеп еткән алмалы* **бит**
*Иманлы* **бит,** *илһамлы* **бит,** *аллалы* **бит**

(«Исемдәр баҡсаһы»)

Ҡайһы бер осраҡта Ш. Бабич омонимдарҙы әҫәрҙең төп композицион сараһы итеп тә ебәрә. Быға «Ни эшләй?» шиғыры асыҡ миҫал. Әҫәрҙең исемендә ҡуйылған һорауға автор «ҡарай» һүҙенең күп мәғәнәлелек һәм омонимик сифаттарын ҡулланып яуап бирә. Мәҫәлән:

*— Ниңә һин яңғыҙ ғына бында, туташ?*
*Һа!.. Имеш, ул һыу янында һал* **ҡарай!**
Юлый ҡуштан ыштанын елберләтеп,
Ыҙғышырға көн дә бер янъял **ҡарай.**

*Йәш бикәскә — Гөльямалға аптыраш:*
*Аҡ, ҡыҙыл, күк, ал, һары бер шәл* **ҡарай.**

Ш. Бабич әҫәрҙәре **һүрәтләү сараларына** ифрат бай. Ким Әхмәтйәнов «уның ижады поэтик һынландырыу сараларының һәр төрлөһөнә лә бай булыуы менән таң ҡалдыра»[3],— тип бик дөрөҫ билдәләй.

[3] Әхмәтйәнов К. Шиғриәт иленә сәйәхәт. Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте, 1967, 20-се бит.

Килтерелгән өҙөктә **һәммә — барсаһы — барыһы** синоним һүҙҙәр. Улар ярҙамында шағир стилистик шымалыҡҡа ирешә.

*Бер танышта һеҙгә бағланды* **күңелдән** *хөрмәтем,*
*Оҡшаны* **ҡәлбең,** *һүҙең һәм нурға сумған килбәтең.*

Был өҙөктә шағир «күңел» менән «ҡәлеб» һүҙҙәрен ҡулланған. Улар икеһе лә бер үк мәғәнәне белдерә: береһе (күңел) телмәрҙә йыш ҡулланыла, икенсеһе (ҡәлеб) иҫкергән һүҙ. Әммә строфаның ритмын булдырыуҙа һәм рифмаһын төҙөүҙә уларҙың урындары урынлы.

Билдәле булыуынса, Ш. Бабичтың ҡатын-ҡыҙҙарға һәм мөхәббәт темаһына арналған шиғырҙары байтаҡ. Ҡатын-ҡыҙҙар образын һынландырыу өсөн шағир матур-матур грамматик синонимдар таба (был синонимдарҙың яһалышы метонимияға нигеҙләнгән).

*Йәш, таҙа буйҙаҡ егеттәр илгә һау ҡайтһын, тиеп,*
*Сихри шаршауҙың эсендә* **наҙлы нәҙек бил көтә**

(«Көтәләр», 1917).

*Гөл сығыр сәскә атып, ҡырҙар булырҙар сып-сыбар,*
*Гөл йыйырға нурлы йөҙлө* **наҙлы неска бил сығыр.**

(«Яҙғы байрамдар», 1915).

**Ҡыҙыл ирен** *бер йылмайһа, хоҙай шаһит,*
*Бөтә фекер әсир төшөр, аҡыл шөрләр...*
*Күсөгөҙҙө иман итеп, мин бағындым,*
*Йөрәгемә мөхәббәт һал,* **матур һындар**

(«Матур һындар», 1916)

«Ҡандала» балладаһында иһә лексик, фразеологик һәм грамматик синонимдарҙың йәнәш ҡулланылыуы әҫәрҙең поэтик байлығын тағы ла раҫлай. Мәҫәлән:

*Ник тиһәң, баш өҫтөнә ул менде* **тиҙ.**
*Шул ҡәҙәр, тиҙ — тик асып йомғансы күҙ.*
*«Тиҙ һикер,* **тиҙ, тиҙ** *һикер,* **тиҙ диуана!**
*Торма,* **мәжнүн,** *унда күренеп донъяға!»*
**Тиҙ генә** *керпеккә ул* **һикереп төшә,**
*Ҡаш янынан эҙҙәрен һыпырып төшә.*
**Ырғый,** *нәҡ керпек осона тап килә,*
*Ул аяҡтарҙы, ҡәһәр,* **шәп** *эләктерә.*
**Ашығып-ашығып,** *ҡан эсер яҡты ҡарай*
*Күҙ төбөнә* **тиҙ генә** *моронон ҡаҙай.*

Һуңғы ике строфала **диуана — мәжнүн, һикереп төшә — ырғый** лексик синонимдар: **тиҙ-тиҙ — шәп — ашығып-ашығып** шулай уҡ бер мәғәнәгә эйә, әммә улар тиң киҫәк һәм парлы һүҙ рәүешендә бирелгән; **«тиҙ генә керпеккә ул һикереп төшә»—«ырғый, нәҡ керпек осона тап килә»**— һөйләмдәр менән белдерелгән грамматик синонимдар.

Ш. Бабич шиғриәтендә **ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр** тағы ла йышыраҡ осрай. Был, күрәһең, тормоштоң ҡапма-ҡаршылығы, шағирҙың уға ҡаршылыҡлы мөнәсәбәте менән аңлатылалар. Ғөмүмән, Ш. Бабичтың бөтә әҫәрҙәре тип әйтерлек антитезаға ҡоролған. «Бай һәм ярлы», «Һалдатҡа алынған бер дуҫыма», «Халҡым өсөн», «Әллә алла, әллә иблис», «Көтәм», «Үткән көндәр», «Әйҙә, күңелем» һ.б. әҫәрҙәре юғарылағы фекерҙе раҫлай. Шағирҙың мөхәббәте һәм нәфрәте һәр саҡ йәнәш йөрөй. Ул халҡына, иленә ҡайнар һөйөүен йәлләмәне, дошмандарға булған нәфрәтен сатира уты аша көйҙөрҙө. Мәҫәлән, «Халҡым өсөн» шиғырының бөтә йөкмәткеһе антитеза алымына ҡоролған. Был поэтик сара аша автор туған халҡына булған тәрән һөйөү хистәрен еткергән:

*Дәртле ҡайнар йырҙарымды*
**Йырламыйым** *дәртем өсөн;*
**Йырлайым** *тик мәңге шат,*
*Дәртле, көләс халҡым өсөн.*

**Иламайым** *мин көндәрем*
*Һырғаҡ, һыуыҡ һалҡын өсөн;*
**Илайым** *тик ярлы, меҫкен*
*Ҡыҙғаныс халҡым өсөн.*

Килтерелгән строфаларҙа **йырламыйым — йырлайым, иламайым — илайым** кеүек ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр аша шағир әҫәрҙең йөкмәткеһенә ярашлы форма таба алған.

Шағирҙың «Көтәм» шиғыры ла (1916) киҫкен контраст картиналарҙы һүрәтләү менән башланып китә: тауҙар, туғайҙар шундай йәмле,— әйтерһең, гөлстан; ә ундағы кешеләр тормошо шул тиклем ғәмле, хәсрәтле,— әйтерһең, бында гүрстан. Ошо күренеште күргән шағир, янып-көйөп, йөрәге әрнеп: «Килерме икән аҡ көн беҙгә лә?»— тип, күпте күргән Урал тауына һорау бирә.

«Үткән көндәр» (1915) шиғырындағы төп композицион алым да ҡабатлауҙар һәм антитеза:

*Бына әле илап, әле* **көлдөм,**
*Әле көйҙөм, әле* **һыҙландым;**
Бына әле **йырлап,** әле **тындым,**
*Әле бар донъяһын ҡыҙғандым.*

Әҫәрҙә ҡапма-ҡаршы мәғәнәле һүҙҙәр һәм һүҙбәйләнештәр генә ҡулланылмай, бөтә йөкмәтке антитезаға ҡоролған: ер тормошо менән ен донъяһы, шағир шәхесе менән йәмғиәт араһындағы ҡаршылыҡтарҙы һүрәтләү аша поэтик фекер үҫтерелә.

Ш. Бабич поэзияһында **омонимдарға** ла байтаҡ миҫалдар табырға мөмкин.

*а) Ҡашың* **ҡара,** *күҙең* **ҡара,** *Сара туташ,*
*Кутәрелеп бисараңа* **ҡара,** *туташ!*
*б) Ҡуйыныңа, Мәрйәм, иреңде ал да тирбәт, иркәлә,*
*Муйыныңа ҡул* **һалһа** *ситтәр,* **һал** *да ебәр елкәгә.*
*в) Алмагөл аһ, бешеп еткән алмалы* **бит**
*Иманлы* **бит,** *илһамлы* **бит,** *аллалы* **бит**

(«Исемдәр баҡсаһы»)

Ҡайһы бер осраҡта Ш. Бабич омонимдарҙы әҫәрҙең төп композицион сараһы итеп тә ебәрә. Быға «Ни эшләй?» шиғыры асыҡ миҫал. Әҫәрҙең исемендә ҡуйылған һорауға автор «ҡарай» һүҙенең күп мәғәнәлелек һәм омонимик сифаттарын ҡулланып яуап бирә. Мәҫәлән:

*— Ниңә һин яңғыҙ ғына бында, туташ?*
*Һа!.. Имеш, ул һыу янында һал* **ҡарай!**
Юлый ҡуштан ыштанын елберләтеп,
Ыҙғышырға көн дә бер янъял **ҡарай.**

*Йәш бикәскә — Гөльямалға аптыраш:*
*Аҡ, ҡыҙыл, күк, ал, һары бер шәл* **ҡарай.**

Ш. Бабич әҫәрҙәре **һүрәтләү сараларына** ифрат бай. Ким Әхмәтйәнов «уның ижады поэтик һынландырыу сараларының һәр төрлөһөнә лә бай булыуы менән таң ҡалдыра»[3],— тип бик дөрөҫ билдәләй.

[3] Әхмәтйәнов К. Шиғриәт иленә сәйәхәт. Өфө. Башҡортостан китап нәшриәте, 1967, 20-се бит.

Үҙенең тыуған төйәге Башҡортостандың матурлығын, байлығын һүрәтләгәндә лә шағир сағыштырыуҙарҙы уңышлы ҡуллана. Башҡортостан ул — **сөнбөлостан, нурбостан, рәйханостан, гөлбостан, йәмбостан, илһамыстан** һәм **шиғырстан.**

Ә башҡорт халҡы иһә арыҫланға сағыштырыла. Шағир туған Башҡортостаны һәм халҡы менән сикһеҙ ғорурлана:

*Илебеҙ түшәк, еребеҙ карауаттай,*
*Ҡары-боҙо эсе юрғандай;*
*Түҙемлебеҙ батыр Салауаттай,*
*Күкрәк ғәйрәт менән тулғандай.*
*Утлы беләк беҙҙең утын яҡһа,*
*Кибер төҫлө өлкән диңгеҙ ҙә;*
*Ныҡлы беләк беҙҙән уғын атһа,*
*Тейер төҫлө Сулпан йондоҙға!*

(«Ғәскәр маршы»)

Килтерелгән миҫалдан күренеүенсә, Ш. Бабич Башҡортостанды дошмандарҙан һаҡлаусы батырҙарҙың сифаттарын да сағыштырыуҙар ярҙамында һынландыра. Образлы һынландырыу алымы булараҡ, Ш. Бабич поэзияһында **эпитеттар** һәм **метафоралар** ҙа уңышлы ҡулланыла. Батша төшөрөлгәс, шағир үҙенең шатлығын метафоралар ярҙамында бына нисек белдерә:

*Афарин, их... донъяға* **шатлыҡ килә,**
*Йыйыла золмат, йылмайып* **аҡлыҡ килә;**
*Емерелә вәхшәт, хаҡһыҙлыҡ, золом;*
*Аҡрын, аҡрын нур сәсеп,* **хаҡлыҡ килә,**

(«Афарин»)

Ш. Бабич эпитеттары күберәк халыҡтың йәнле һөйләү теленә, фольклор әҫәрҙәренә яҡын.

Мәҫәлән:

**Вәхши** *күҙ,* **шаҡшы** *күңел,* **алдаҡсы** *тел донъя тулы,*
*Күпме-күпме тоғролоҡ ҡорбан була ялған менән.*
**Аҡ** *күңелде таплатып,* **киммәт** *намыҫты тапатып,*
*Торма ерҙә, эй,* **бөйөк** *выждан, йыйын шайтан*
*менән!*

(«Һалдатҡа алынған бер дуҫыма»)

Бер строфала ғына күпме эпитет! Улар барыһы ла әҫәрҙең төп фекерен — һуғыш осорондағы фажиғәне — образлы күҙ алдына баҫтыра.

Ш. Бабич шиғырҙарында, һүрәтләү сараһы булараҡ, **төҫтәр** күп ҡулланыла: улар ябай аныҡлаусы ла, эпитет та булып килә. Билдәле булыуынса, һәр төҫтөң символик мәғәнәһе бар: аҡ — сафлыҡ, асыҡлыҡ; ҡара — фажиғә, ҡайғы; зәңгәр — матурлыҡ; ҡыҙыл — көрәш символы һ.б. Ә Бабичтың яратҡан төҫө — аҡ. Шағир уның төрлө мәғәнә биҙәктәрен оҫта ҡуллана. Мәҫәлән, «Халҡым өсөн» шиғыры «ап-аҡ алтын йырҙарымды» тип башлана. Үҙ аҙмышын халыҡ аҙмышына ҡушып өлгөргән шағир киләсәккә өмөтөн өҙмәй, ғәҙеллектең һәм «аҡ көндөң» тыуырына ышанып йәшәй. Был фекерҙе ул «ап-аҡ алтын йырҙарымды», «алтын илем», «дәртле ҡайнар йырҙарымды», «дәртле, көләс халҡым», «алтын сағым», «таҙа антым» кеүек сағыу эпитеттар һәм метафоралар ярҙамында бирә. Билдәле булыуынса, шағир бөтә ғүмере буйы яҡтылыҡҡа ынтылып, ирекле көндәрҙең тыуасағына тәрән ышаныс менән йәшәне һәм шул тормошто яҡынайтыу, халҡын бәхетле итеү өсөн көрәште.

*Юлыңдың* **артын яп** — *төрөлһөн,*
**Алдын ас — аҡ** *көндәр күренһен,*
*Өс йөҙ йыл иҙелгән* **аҡ** *йәнең*
*Терелһен, терелһен, терелһен!*

(«Хөрриәт бүләге»)

Был өҙөктә «аҡ» төҫө ике урында ҡулланыла. «Аҡ көндәр», тимәк, ireклек һәм азатлыҡ көндәре, ә «аҡ йәнең» халыҡ һөйләшендәге «пак йәнең» мәғәнәһенә тап килә.

«Аҡ» төҫө Ш. Бабич тарафынан тәбиғәттең һәм ҡыҙҙарҙың матурлығын тасуирлағанда, туған халҡына характеристика биргәндә, уның азатлығы өсөн көрәште күрһәткәндә тура мәғәнәһендә лә (аныҡлаусы), күсмә мәғәнәһендә лә (эпитет) образлы картина тыуҙырыусы сара сифатында килә. Әйтелгән фекерҙе түбәндәге миҫалдар раҫлай.

Ш. Бабичтың «Әйҙә, милләт!» шиғырында шундай юлдар бар:

*Яҡты нурлы көндәрең — алдыңда. Был хаҡ вәғәҙәһе.*
*Ана күренә ҡибла яҡлап бик матур* **аҡ шәүләһе.**

«Шәүлә» һүҙенә «аҡ» эпитеты бигүк йәбешмәгән һымаҡ, сөнки телмәрҙә «ҡара шәүлә» төшөнсәһе ныҡ ынған. Шиғырҙа автор яҡты киләсәкте, «нурлы көндәрҙе» ана шулай күҙ алдына баҫтыра. Әммә ул көндәр лирик герой өсөн әлегә алыҫтағы шәүлә рәүешендә һынлана, тик уны яҡынайтыу өсөн түҙергә һәм көрәшергә кәрәк.

Әйткәндәй, ошондайыраҡ поэтик алымды һуғыш осоронда яҙылған «Ул ҡыҙ мине ташлап китмәне» (1944) шиғырында М. Кәрим дә ҡулланды. Унда шундай юлдар бар:

*Зәңгәр уттар янған бүлмә эсендә*
*Үлем менән йәшәү көрәште,*
*Баш осомда торған* **аҡ күләгә**
*Түшәгемә эйелеп өндәште.*

Ике әҫәрҙәге «шәүлә» һәм «күләгә»нең аҡ төҫ менән бирелеүе сәйерерәк тойолһа ла, уларҙы шағирҙарҙың уңышлы поэтик табышы тип ҡарарға кәрәк, сөнки уларҙың образлы йөкмәткеһе ифрат бай. Һуғышта ҡаты яраланып хәл өҫтөндә ятҡан яугир-шағирға аҡ халатлы шәфҡәт туташтары аҡ күләгә булып күренә. Улар, миллионлаған һалдаттарҙың ғүмере һағында тороп, йәшәүҙәренә өмөт уята. М. Кәрим аҡ халатлы ҡыҙҙарҙың фиҙаҡәр хеҙмәтенә, һуғыш осорондағы ҡаһарманлыҡтарына дан йырлай.

Ш. Бабич поэзияһында «ҡара» төҫө лә йыш осрай. Шағир уны тормоштағы кире күренештәрҙе һәм синфи көрәш ҡаршылығын һүрәтләгәндә күберәк ҡуллана. Мәҫәлән:

*Быуын-быуын ғүмер Башҡортостан*
*Һуғарылды ҡара ҡан менән;*
*Сыҡтыҡ ҡара көстән — ҡанды эскән,*
*Һуғарылһын инде йәм менән.*

(«Ҡурайҡайға», 1918)

Башҡортостандың тарихы бына шулай күҙ алдына баҫтырыла.

Түбәндәге миҫалдарҙа ла «ҡара» эпитеты дошмандарға тапҡыр характеристика биреүсе поэтик алым ул:

*«Эстениһәң — бөттөң... имеш, һуң, ниңә үҙең эсәһең?*
*Эй кеше ҡайрап йөрөй торған* **ҡара ҡайраҡ ташы!»**

(«Бер муллаға», 1914)

*Улар,* ***ҡара шайтан*** *булһалар ҙа,*
*Йөрөр тыштан яҡшы күренеп;*
*Һеҙҙе аяғандай һүҙҙәр һөйләп,*
*Фәрештәләр һымаҡ ҡыланып.*

(«Башҡорт халҡына көйлө хитап», 1919)

Революция һәм көрәш символы булған «ҡыҙыл» төҫө Бабич йәшәгән һәм ижад иткән шаулы заманда бер әҙипте лә битараф ҡалдырманы. М. Ғафури, Д. Юлтый, Т. Йәнәби, Б. Ишемғол һ.б. яҙыусыларҙың әҫәрҙәрендә һәм шиғырҙарында ул символик образ булараҡ йыш ҡулланылды. Ш. Бабич та үҙенең поэзияһында «ҡыҙыл» төҫөн аныҡлаусы, эпитет, символик образ итеп поэтиклаштырҙы. Уның тәбиғәт һәм мөхәббәт лирикаһында, ҡатын-ҡыҙҙарға арналған шиғырҙарында башҡалар менән йәнәш ҡыҙыл төҫө лә матурлыҡты, гүзәллекте белдереү сараһы итеп бирелде.

Мәҫәлән:

*Аҡ,* ***ҡыҙыл,*** *зәңгәрле сәскә баҡсабыҙҙың гөлдәре.*

(«Беҙҙең баҡса», 1910)

*Бына әле генә* ***ҡыҙыл*** *гөлдөң*
***Ҡыҙыл*** *нурын һиптем йөҙөмә.*

(«Үткән көндәр», 1915)

***Ҡыҙыл*** *ирен бер йылмайһа, хоҙай шаһит.*

(«Матур һындар», 1916)

***Ҡып-ҡыҙыл*** *бешкән емеш төҫлө бешерһең*
*бер заман.*

(«Сажидәгә», 1916)

Революцияның изге эше өсөн йәнен-тәнен аямай көрәшеүселәрҙе данлау менән бергә Бабич ошо көрәшселәр араһында оялаған ике йөҙлө бәндәләрҙең ысын йөҙөн асыусы «Буржуй», «Мөртәт социалистарға» шиғырҙарында «ҡыҙыл» һәм «ҡара» төҫтәрен оҫта ҡулланып, халыҡты алдарға тырышыусы буржуазияның синфи асылын сатирик алымдар менән күрһәтә.

***Ҡып-ҡыҙыл һүҙҙәр*** *һалып йөрөттөң ҡара*
*күкрәккә һин,*
*Бысраҡ төрҙөң дә ырғыттың* ***ҡыҙыл сепрәккә***
*һин.*

(«Мөртәт социалистарға», 1917)

Уң беләгенә ҡыҙыл таҫтамал бәйләп алған буржуйҙан да Бабич әсе көлә. Мәҫәлән, уның портретын һәм ҡыланыштарын бына нисек һүрәтләй:

***Ҡып-ҡыҙыл ҡандар*** *йүгергән күҙҙәреңдең ағына,*
*Күҙләүең — ҡорһаҡ ҡына, һүҙҙәрең — доңъя ғына*
*Социал тимһең үҙеңде,* ***ҡып-ҡыҙыл,*** *тип, маңлайың?*
*Ниҡ* ***ҡыҙыл*** *ул? Сөнки имгәнһең фәҡирҙәр күҙ майын...*

(«Буржуй», 1917)

Шағир хыялында күккә оса, йондоҙ үбә, диңгеҙ кисә. Шул рәүешле гипербола алымы аша автор үҙ геройының тәрән кисерештәрен һүрәтләй, ер тормошонан ҡәнәғәт булмауын күрһәтә. Шиғырҙың теле лә

бик үҙенсәлекле: лирик геройҙың кисерештәрен һәм эҙләнеүҙәрен асыу өсөн автор «мендем», «ҡойондом», «уйнаным», «һөйөндөм», «төйөлдөм», «туйманым», «киттем», «тапманым», «тынманым» кеүек хәл-торошто күрһәтеүсе ҡылымдарҙы уңышлы ҡуллана. Был шиғырҙы төрлө күҙлектән сығып баһаларға мөмкин. Әсәр империалистик һуғыштың ҡыҙған бер мәлендә яҙылған. «Мәхшәр көсө», «ут матдәһе» кеүек поэтик деталдәр һуғыштың кешеләргә килтергән фажиғәһен аса. Әммә әсәр һуғыш тураһында ғына түгел, шул һуғыш тыуҙырған ауыр, тонсоу тормош тураһында ла. Шиғыр шулай уҡ шәхес менән йәмғиәт араһындағы ҡаршылыҡты ла күрһәтә. Шуға ла автор ер тормошона ен донъяһын ҡаршы ҡуя. Әммә ул был ярһыуында, ынтылыштарында халҡынан айырылмай. Халыҡ яфа сиккәндә, хыялындағы матур тормош ҡына уны ҡәнәғәтләндерә алмай. Романтик пафос менән һуғарылған «ҡояшлы шиғырҙарҙа» Бабич халҡының уй-хыялдарын сағылдырҙы, уға арымай-талмай хеҙмәт итергә, ергә «ай нурҙарын» сәсергә ант итте.

Бабич өсөн Ай — нур сығанағы, Ҡояш — киләсәк матур тормош хыялы, Йондоҙҙар — серле дуҫтары, кәңәшселәре:

*Зәңгәр күк — тажым, сыбар ер — тәхетем,*
*Үҙем азат йән, аҡ ҡояш — бәхетем.*
*Йондоҙҙар һәм ай — серсе дуҫтарым,*
*Һандуғас, турғай — йырсы ҡоштарым.*

(«Бәхетем», 1916).

Шулай итеп, күк есемдәрен йәнләндереп, шағир ер тормошоноң яҡты киләсәктең матур образын тыуҙырҙы.

Һүҙҙе йомғаҡлап, Ш. Бабич шиғриәтенең камиллығына арналған күренекле әҙиптәрҙең фекерҙәрен килтереү урынлы булыр.

Шағирҙың поэтик оҫталығына һоҡланып, Ғ. Ибраһимов: «Бабич ритмды һәм баҫымдарҙы үҙ урынында һаҡлау менән бергә, һүҙҙәрҙә, һөйләмдәрҙә шундай бер еңеллек, байлыҡ күрһәтә ки, әйтерһең, ул үҙ алдына теҙелгән матур таштар менән үҙе теләгәнсә уйнай, уларҙы теләгәнсә йыя, туҙҙыра, сәсә, тағы йыя»,[4]— ти. Ә К. Әхмәтйәнов Бабич шиғырҙарының музыкаллеген һыҙыҡ өҫтөнә ала: «Бабич шиғырҙарында мәғәнәле һүҙҙәр гармония тип атала торған музыка тарафынан оҙатылып килә».[5] Шуға күрә Ғ. Хөсәйенов Бабич шиғырҙарын өйрәнеүҙе «Хазина иленә мауыҡтырғыс сәйәхәт»[6] тип атай.

**Булат ҒАФАРОВ,**
**Стәрлетамаҡ дәүләт педагогия институты доценты**

---

[4] Әхмәтйәнов К. Шиғриәт иленә сәйәхәт. Өфө, Башҡортостан китап нәшриәте, 1967, 6-сы бит.

[5] Әхмәтйәнов К. Шиғриәт иленә сәйәхәт. Өфө. 1967, 21-се бит.

[6] Хөсәйенов Ғайса. Бабич — шиғыр оҫтаһы. («Ағиҙел», 1962, № 2, 67-се бит.